Башҡорт теле – туған телем
(Телдән журнал)

Маҡсат. Туған тел тураһында фекер алышыу; үҙ телеңде ҡәҙерләргә, унын бөгөнгөһөн, киләсәген хәстәрләргә өйрәтеү; уҡыусыларҙа илһөйәрлек, телһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү.

Йыһазландырыу. Тапҡыр, ҡанатлы һүҙҙәр, мәҡәлдәр, әйтемдәр яҙылған плакаттар; презентация.

Уҡытыусы. 1999 йылдың ноябрь айында ЮНЕСКО үткәргән конференцияла туған телдәр проблемаһы ҡарала һәм ул 2000 йылдың февраленән билдәләнә башлай. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, ер шарындағы 6700 телдең яртыһына юғалыу ҡурҡынысы янай. Шуға ла һәр халыҡтың ғөрөф-ғәҙәтен, йолаларын, йыр-моңдарын, ауыҙ-тел ижадын, ғөмүмән, телен һаҡлап ҡалыу маҡсатында 21 февраль – Халыҡ-ара туған-тел көнө тип иғлан ителә. Бөгөнгө срабыҙҙы, уҡыусылар, туған телебеҙгә бағышлайбыҙ һәм телдән журнал формаһында үткәрәбеҙ.

Журналдың **беренсе бите "Туған тел – мәңгелек хазина"** тип атала. Сығыш яһау өсөн һүҙҙе ____ бирәбеҙ.

1.Туған тел… Кеше тәү мәртәбә ошо телдә "әсәй", "атай" һүҙҙәрен әйтә. Ошо тел ярҙамында үҙенең тирә-яғындағы төрлө төшөнсәләр, атамалар менән таныша, кешеләр менән аңлаша. Әхләҡ төшөнсәләрен әсә телендә аңына һеңдерә, күңеленә беркетә.

"Халыҡтың теле – уның тормошоноң иң матур, мәңге шиңмәй, мәңге һулымай торған сәскәһе ул. Телдә бөтә халыҡ сағыла. Тыуған илдең күге, һауаһы, уның баҫыуҙары һәм яландары, урмандары һәм тауҙары, йылғалары һәм күлдәре, ҡышҡы бурандары һәм йәйге ямғырҙары уның йырҙарында, моңло көйҙәрендә, сәсәндәр ижадында яңғырай.

Халыҡтың бай, саф телендә туған тәбиғәт кенә түгел, ә уның бөтә тарихы, рухи донъяһы сағыла.

Бына ни өсөн кәрәк ул туған телде өйрәнеү! Бына ни өсөн туған телде өйрәнеү кешенең илһөйәр булып тәрбиәләүендә төп урында тора!" - тип әйткән рус яҙыусыһы К.Ушинский.

2. Башҡорт теле үҙ тарихында 3 яҙма алыштырҙы. Борон- борондан һәрәп графикаһы ҡулланылып килгән. 1928-1929 йылдарбa латин ябыуы ҡабул ителә. Ә 1940 йылда рус графикаһына нигеҙләнгән алфавит төҙөлә.

3. Хәҙерге башҡорт теле – һәр яҡлап үҫкән телдәрҙең береһе. Туған телдә халыҡтың тормошо һәм уның Тыуған илгә булған ҡайнар мөхәббәте сағыла. Ата-бабаларыбыҙ борон-борондан үҙ туған теленә бик һаҡсыл булған. Быуаттар буйына тупланған аҡыл хазинаһын тел аша үҫеп килеүсе быуындың күңеленә һеңдерергә тырышҡан.

4. Туған тел... Туған тел кешене белемле, аҡыллы, йыйнаҡ фекерле, тотанаҡлы, ғилем донъяһына ынтылыусан итеп тәрбиәләй. Кешенең үҙ иленең патриоты, үҙ халҡының улы, ҡыҙы булыуы ла туған телгә бәйләнгән. “Телде үҫтергән, илде үҫтерер”,- ти халыҡ мәҡәле. Телебеҙҙе һаҡлайыҡ, үҫтерәйек.

Укытыусы. Журналдың **икенсе бите “Туған телем – моңло көйөм”** тип исемләнгән шиғыр һөйләүселәр конкурсы тип атала. Туған тел хаҡында фекер йөрөткәндә, беренсе сиратта шағирҙар ижадына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ысынлап та, шағирҙар – улар ысын поэтик һүҙ оҫталары, һүҙҙең ҡәҙерен белеүселәр, халыҡтың телен һәм рухын һаҡлаусылар.

Телдең халыҡ тарихы, уның мәҙәниәте, рухы һәм донъяға ҡарашы, телдең халыҡты халыҡ итеүҙә, кешене шәхес итеп формалаштырыуҙа, уның белем һәм тәрбиә ҡоралы булыуы хаҡында арҙаҡлы әҙиптәребеҙ М.Аҡмулла, М.Кәрим, З.Биишева, Б.Бикбай, Р.Ғарипов, Х.Ғиләжев, Р.Бикбаев һәм башҡа ҡәләм оҫталары илһамланып ижад иткәндәр. Хәҙер һүҙ шиғыр һөйләүселәргә.

Укытыусы. Эй туған тел! Ниндәй ҡөҙрәтлеһең һин! Гүзәлһең, күркәмһең, йыйнаҡһың; һин байһың, ҡеүәтлеһең, мәргәнһең! Шуға ла халыҡ ил ағаһы булған сәсәндәрҙең ялҡынлы тапҡыр һүҙен яу ҡыйыр булат ҡылыс үткерлеге менән сағыштырған да инде. Беҙ ҙә лә үткер, тапҡыр телле сәсәндәр барҙыр. Журналдың **өсөнсө бите “Бер тигәс тә ни якшы?”** тип атала. Хәҙер беҙҙе сәсәндәр бәйгеһе көтә. Кемдәр оҫта телле, тапҡыр һүҙле булыр икән – жюри билдәләр.

Укытыусы. Күренекле академик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйеновтың ошондай мәртәбәле һүҙҙәре бар: «Туған тел – халҡыбыҙҙың беҙгә аманат иткән теләге». Әҙиптең был һүҙҙәре киләсәк быуынға оло яуаплылыҡ өҫтәй. Туған телде белеү, ҡәҙерле аманатты һаҡлау – һәр кемдең мөҡәддәс бурысы. Журналдың **дүртенсе бите “Башҡорт телен беләһеңме?”** тип атала. Хәҙер һеҙгә телебеҙ тураһында викторина һорауҙарын тәкдим итәм. Кем күберәк яуап бирер?

Укытыусы. Бөгөнгө көндә беҙ үҙ туған телдәребеҙҙә белем алабыҙ. Ошо матур, наҙлы телебеҙҙе данламай ҙа мөмкин түгел! Журналдың **бишенсе бите “Туған телемә дан йырлайым”** тип атала. Һүҙ менән генә түгел, йыр-моң менән дә телебеҙгә дан яуҙырайыҡ.

Һүҙ ____ бирелә.

Һүҙ ____ бирелә.

Һүҙ ____ бирелә

Укытыусы. Ҡәҙерле уҡыусылар! Халыҡ-ара туған телдәр көнөнә арналған сарабыҙ аҙағына яҡынлашты. Телдең киләсәге, илдең яҙмышы беҙҙең ҡулда. Тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына күренгән ошо кәңәштәрҙе күңелегеҙгә һалып ҡуйырға тәкдим итәбеҙ :

- Ҡайҙа йәшәүеңә ҡарамаҫтан, туған телеңде онотма!
- Өйҙә туғандарың, яҡындарың, ғөмүмән, таныштарың менән мөмкин тиклем туған телеңдә аралаш. Милли йолаларға иғтибарлы бул, ҡәрҙәш- ырыуың менән тығыҙ бәйләнеш тот.
- Башҡа милләт кешеләрен, бүтән телдәрҙе ихтирам ит. Ә үҙ милләтеңдән булғандарҙы туғаның кеүек күр, кәрәк саҡта ярҙамлаш.

Ана шулай йәшәгәндә генә алға киткән, оҙон ғүмерле, иле, теле бар милләт булырбыҙ.

Укытыусы. Хәҙер сараны йомғаҡлау өсөн һүҙ жюри рәйесе____ бирелә.